БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫНЫҢ СТӘРЛЕТАМАҠ ФИЛИАЛЫ БАШҠОРТ ҺӘМ ТӨРКИ ФИЛОЛОГИЯҺЫ ФАКУЛЬТЕТЫ
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ КҮГӘРСЕН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН ХАКИМИӘТЕНЕҢ МӘҒАРИФ БҮЛЕГЕ МУНИЦИПАЛЬ ҠАҘНА УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ КҮГӘРСЕН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫНЫҢ МОРАҠ АУЫЛЫ 1-СЕ ҺАНЛЫ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ УРТА ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ

| Ҡаралды: | Килешелде: | Раҫлайым: |
| --- | --- | --- |
| Күгәрсен районы Мораҡ ауылы 1-се һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең педсовет ултырышында Протокол № 2 | Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы башҡорт һәм төрки филологияһы факультеты деканы | Күгәрсен районы мәғариф бүлеге начальнигы |
| ________ И.Р. Арысланбаев | ________ Р.Х.Илишева | ________ Р.Р.Әхмәтйәнов |
| «24» август 2019 й | «30» август 2019 й | «26» август 2019 й |

# “ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ ОҪТАХАНАҺЫ”

## Дәрестән тыш эшмәкәрлек программаһы

*Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең*

*5-6-сы кластары өсөн*

Ҡулланыу ваҡыты: 3 йыл

Мораҡ

2019

**Аңлатма яҙыу**

**Программаға дөйөм характеристика**

Дәрестән тыш эшмәкәрлек буйынса программа уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-6-сы кластары өсөн тәғәйенләнгән. “Телмәр үҫтереү оҫтаханаһы”ның дәрестән тыш эшмәкәрлек программаһы Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалының башҡорт һәм төрки телдәр филологияһы факультеты коллективы, Күгәрсен районы мәғариф бүлеге методисы Ситдиҡова Ф.Ә., Күгәрсен районы Мораҡ 1-се урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Бикбаева А.М., Аллабирҙина Г.Р., Илмөхәмәтова З.Ф. менән берлектә төҙөлдө.

**Йүнәлеше.** Рухи-әхлаҡи, дөйөм интеллектуаль, мәҙәни, практик.

Эш программаһы дөйөм белем биреү буйынса федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарынан сығып төҙөлдө. Башҡортостан Республикаһы Күгәрсен районы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Мораҡ ауылы 1-се урта мәктәбенең уҡыу планына ярашлы эшләнде. Ул дәрестәрҙән һуң көндөң икенсе яртыһында үткәрелә. Программала уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, рус телле балаларҙың телде үҙләштереү дәрәжәһенә тура килерлек, метапредмет бәйләнештәрҙе, уҡыу процесындағы логик эҙмә-эҙлелекте күҙ уңында тотоп темалар һайланған һәм сәғәттәр бүленгән. Шәхестәрҙең юбилейҙарына, календарҙағы ҡыҙыл даталарға ярашлы тематик планға үҙгәрештәр индерергә мөмкин. Мәҫәлән: 2020 йыл Башҡорт теле һәм Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған темалар өҫтәнек. Башҡорт теле йылы сиктәрендә тәҡдим ителгән сараларҙың урындарын тематик планға ярашлы алмаштырҙыҡ.

Дәрестән тыш эшмәкәрлек уҡыусыларҙың белемен киңәйтә, дәрестә үтелгәндәрҙе телмәр практикаһы ситуацияһында ҡабатларға ярҙам итә, башҡорт теленә мөхәббәт уята, уны өйрәнергә ҡыҙыҡһыныуын арттыра. Дәрестә тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү технологияһы алымдарын ҡулланып балаларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереү, үҙаллылыҡ тәрбиәләү, иң мөһиме — баланы дөрөҫ һорау ҡуйырға һәм уға яуап бирергә өйрәтеү. Уҡыусылар сағыштырырға, анализларға, планлаштырырға, маҡсат ҡуйып, уны хәл итеү юлдарын табырға

өйрәнәләр. Алған белемдәрен телмәр практикаһында ҡулланырға - йыйылыштарҙа, үҙ иптәштәре алдында сығыш яһау, тасуири һөйләү, яҙыу күнекмәләрен нығытыу.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү проблемаһы һәр саҡ актуаль. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә алған белемдәрен практикала һирәк ҡулланалар. Шуға күрә дәрестән тыш эшмәкәрлектә телмәр үҫтереүгә баҫым яһау мөһим.

Программаның **маҡсаты:** уҡыусыларҙы башҡорт телендә аралашырға, үҙҙәренең фекерен телдән һәм яҙма рәүештә аңлата, тормошта практик файҙаланырға өйрәтеү; башҡортса һөйләгәнде, уҡығанды, ишеткәнде аңлау күнекмәләре булдырыу.

Маҡсаттан сығып түбәндәге **бурыстар** ҡуйылды:

- телмәр компетентлылығын үҫтереү, фекерендә еткерә белеү;
- уҡыусыларҙың дәрестәрҙә үҙләштергән белемдәрен дәрестән тыш эшмәкәрлектә нығытыу, тәрәнәйтеү һәм тормошта ҡулланырға күнектереү;
- төрлө ситуацияларҙа уҡыусыларҙы үҙ-ара башҡортса аралашырға өйрәтеү;
- әҙәбиәт һәм сәнғәт аша уҡыусыларҙың танып белеү, ижади һәләттәрен үҫтереү;
- уҡыусыларҙа башҡорт телен, йолаларын, мәҙәниәтен, тарихын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу;
- граждандлыҡ үҙаң һәм патриотизм тойғоһон формалаштырыу;
- уҡыусыларҙы рухи һәм әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү.

“Телмәр үҫтереү оҫтаханаһы” программаһының **принциптары**:

- телде коммуникатив нигеҙҙә өйрәнеү;
- баланың үҫеше өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу;
- дәрестән тыш эшмәкәрлектең туған башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре менән үҙ-ара тығыҙ мөнәсәбәттә булыуы;
- дәрестән тыш эшмәкәрлектә предмет-ара бәйләнеш булыуы;
- фәннилек һәм системалылыҡ, дауамлылыҡ, күсәгилешлелек принциптары;
- баланың психик һәм физик һаулығын һаҡлау.

**Ҡулланыу ваҡыты:** 3 йыл. Аҙнаһына 1 дәрес, йылына 34 дәрес. Дәрестәр һәр класта айырым уҡытыла.

**Эште ойоштороу төрҙәре:** төркөмдә, индивидуаль, фронталь

**Метод, алымдар.**

- Уҡытыусы һүҙе
- Әңгәмә
- Эҙләнеү
- Уйын
- Проектлау
- Күргәҙмә материал ҡулланыу
- Экскурсия
- ИКТ
- Викторина
- Сәйәхәт
- Сығыштар яһау.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр.**

Эшләнгән эштәрҙе, эшмәкәрлек һөҙөмтәләрен барлау, эш сифатын контролләү, баһалау. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ итеп һөйләргә, уҡығанды аңларға өйрәтеү, телмәр үҫтереү. Башҡорт теленә, әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.

- ғилми-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашыу;
- проекттар, презентациялар, стена гәзиттәре, видеосюжеттар эшләү;
- буктрейлер төшөрөү;
- кластан тыш саралар үткәреү;
- Бәйләнеш селтәрендә төркөм булдырыу;
- музейға барыу;
- инша, шиғыр яҙыу;
- Күгәрсен районы мәғариф бүлеге һәм Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалының башҡорт теле һәм төрки телдәр филологияһы факультеты менән берлектә үткәрелгән шиғыр һөйләү конкурсында, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашыу;

- Башҡортостандың күренекле шәхестәре менән осрашыуҙар үткәреү;
- фольклор байрамдарын уҙғарыу;
- әкиәт һөйләү конкурсында ҡатнашыу.

**Шәхси һөҙөмтәләр.**

1. Үҙ белемеңде арттырыу һәм эшмәкәрлегеңде ойоштора алыу оҫталығын формалаштырыу.
2. Йәмәғәт, тикшеренеү, ижади һәм башҡа төр эшмәкәрлек барышында аралаша белеү оҫталғын үҫтереү.
3. Уҡыусыларҙа граждандлыҡ тойғоһо, башҡа халыҡтарға ҡарата ихтирам формалаштырыу.
4. Туған телде һаҡлау, телмәр мәҙәниәтен камиллаштырыу.
5. Һаулыҡты нығытыу, әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү, уларҙы үтәүҙең мөһимлеген аңлатыу.
6. Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белеү, уларҙы һаҡлау, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнеү, таратыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре.**

1. Уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
2. Теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, уның буйынса презентация эшләй белеү.
3. Мәҙәни аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булыу, үҙ фекерен яҡлағанда уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ аныҡ, эҙмә-эҙ бәйән итеү, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышыу, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белеү.
4. Үҙ фекереңде аңлата, раҫлай, дәлилләй белеү.
5. Парҙарҙа һәм төркөмдәрҙә эшләй белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре.**

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү.
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү.
3. Шиғырҙарҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
4. Уҡығандың йөкмәткеһен еткерә белеү, үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү.

5. Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм дәрестә шулар тураһында фекер алышыу .

6. Географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү.

7. Билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

**Программаның йөкмәткеһе**

**V класс**

1. **Башҡорт халыҡ ижады.** Халыҡ ижадына хас булған терминдарҙы үҙләштереү һәм уҡыу процесында ҡулланыу, һөйләү һәм монологик телмәр күнекмәләренә эйә булыу, танып белеү маҡсатын ҡуя белеү. Әкиәттәрҙе сәхнәләштереү, тасуири яттан һөйләй белергә өйрәтеү.

Башҡорт халыҡ йырҙары, йолалары, уйындары, музыка ҡоралдары, милли кейемдәре, биҙәүестәре үҙенсәлектәрен асыҡлау. Башҡорт йыр сәнғәте һәм башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар тураһында һөйләшеү, фекер алышыу. “Халҡым ынйылары” йомғаҡлау байрамын үткәреү.

**2. “Йәш хәбәрселәр” түңәрәге.** Ваҡытлы матбуғат төрҙәрен, жанрҙарын, уларҙы ижад итеү үҙенсәлектәрен өйрәнеү. Интервью алырға өйрәнеү. Мәктәп, класс газеталарының редакторҙары һәм редколлегия ағзалары, йәш хәбәрселәре булыу. “Моразым” редакцияһына экскурсияға барыу. Иғлан, афиша, реклама, ҡотлау яҙыу. Мәҡәләләр әҙерләү, материалдар туплау, баҫмаға биреү. Практик эш: мәктәп гәзите сығарыу, видео төшөрөү.

**VI класс**.

**1. Тыуған илем – алтын бишек.** Башҡортостан тураһындағы әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеләрен үҙләштереү. Төрлө быуын яҙыусыларының әҫәрҙәрендә тыуған ер һәм Башҡортостанды һүрәтләү алымдарын һәм сараларын күҙәтеү, һығымталар эшләү. Башҡортостандың тарихи үткәне менән таныштырыу, хәҙергеһе һәм киләсәге тураһында фекер алышыу. Башҡортостандың билдәле, матур урындары менән танышыу. Йыл һайын үткәрелгән “Республикама дан йырлайым” иншалар конкурсы өсөн инша,

шиғыр, эсселар яҙыу. Башҡортостандың 7 мөғжизәһенә бәйле, “Тыуған яғым ынйылары” исемле түңәрәк өҫтәл үткәреү. “З. Биишева уҡыуҙары”, “Күкрәгемдән ҡоштар осорам” шиғырҙы яттан һөйләүселәр конкурсына әҙерлек алып барыу һәм ҡатнашыу. Тыуған еребеҙгә бәйле “Башҡортостанды беләһеңме?” викторинаһын үткәреү. Этношәмбе. Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың милли уйындарына, кейемдәренә, аштарына бағышлап кисә үткәреү. Тыуған илде маҡтап шиғырҙар һөйләү, йырҙар башҡарыу.

2. **Исемдәрҙә – илдең хәтере.** Үҙ ауылыңдың, тыуған яғыңдың үҙенсәлекле урындарын, ер-һыу атамаларын, уларға ҡағылған тарихтарҙы, легендаларҙы теркәп алып ҡалыу: Мораҡ, Әүлиә тауы, Эйәрле тау һ.б. Иҫтәлекле урындарға сәйәхәт ҡылыу. Музейға, китапханаға барыу. Ғилми эҙләнеү эшен ойоштороу. “Топонимик альбом” яһау, проект эшен яҡлау.

3. **Матурлыҡ донъяны ҡоткарыр!** Матурлыҡты таный, күрә, яҡшылыҡты ямандан айыра белергә өйрәтеү; Тыуған илебеҙҙең тәбиғәтен һаҡлау, уның байлығы, матурлығы менән ғорурланыу тойғоһо үҫтереү. “Нимә ул матурлыҡ?” темаһына диспут-дәрес ойоштороу. Беҙҙең ерлеккә тап килгән милли башҡорт кейемдәрен, биҙәүестәрен өйрәнеү; һаҡал, селтәр эшләү буйынса оҫталыҡ класы үткәреү; күргәҙмә ойоштороу. Кешенең тышҡы һәм эске матурлығы, рухи донъяһы, сәләмәт тормошо тураһында әңгәмә, түңәрәк өҫтәл, проект эше эшләү. “Оҙон толом” конкурсы үткәреү. Балаларҙың эске донъяһын, ижади һәләттәрен күрһәтеү маҡсатында кластан тыш сара үткәреү.

4. **Утлы йылдар ауазы...** Еңеү көнө тураһында әңгәмәләшеү. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында тарихи белешмә биреү. Георгий таҫмаһы, Исемһеҙ һалдат һәйкәле тураһында фекер алышыу. Һуғыш темаһына һәм Еңеү көнөнә арналған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, образдар системаһын анализлау. Яугир һалдат образын һүрәтләү сараларын һәм алымдарын асыҡлау. Һуғыш темаһына арналған тарихи-документаль, нәфис кинофильмдар, спектаклдәр ҡарау. Еңеү парадындағы “Үлемһеҙ полк” тураһында әңгәмә ойоштороу. Һуғыш үткән урындар буйлап ситтән тороп сәйәхәт итеү. Һуғыш темаһына һәм Еңеү көнөнә арналған йырҙар тыңлау, проект эштәре эшләү. Бөйөк Ватан һуғышы ветеранына хат яҙыу, ярҙам күрһәтеү.

**V класс.**

**Календарь – тематик план**

| № | Тема | Сәғәт һаны | Үткәрелеү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| **1. Башҡорт халыҡ ижады** | | | |
| 1 | Инеш дәрес. Башҡорт халыҡ әкиәттәре. | 1 | |
| 2 | Батырҙар тураһында әкиәттәр. Әңгәмә. | 1 | |
| 3 | Тылсымлы әкиәттәр. Тәржемә итеү. | 1 | |
| 4 | Тормош көнкүреш әкиәттәре. Ролдәргә бүленеп уҡыу. | 1 | |
| 5 | Хайуандар тураһында әкиәттәр. Презентация эшләү. | 1 | |
| 6 | Йомро-йомро йомғағым. Яттан әкиәт һөйләү конкурсы. | 1 | |
| 7 | Өләсәйемдең һандығы. Ярыш. | 1 | |
| 8 | З. Биишеваның “Ел-ел арбам” әкиәтен сәхнәләштереү. | 1 | |
| 9 | Фольклор. Әңгәмә. | 1 | |
| 10 | Башҡорт халыҡ йырҙары. Әңгәмә. | 1 | |
| 11 | Башҡорт йолалары: “Кәкүк сәйе”, “Ҡарға бутҡаһы” видеофильм ҡарау. “Самауыр сәйе”, “Картуф байрамы” тураһында фекер алышыу. | | |
| 12 | Шәжәрә төҙөү. | 1 | |
| 13 | Башҡорт музыка ҡоралдары. Музыкаль кисә. | 1 | |
| 14 | Башҡорт халыҡ уйындары. | 1 | |
| 15 | Башҡорт халыҡ милли кейемдәре, биҙәүестәре. Китапханаға барыу. | 1 | |
| 16 | “Халҡым ынйылары” йомғаҡлау байрамы. | 1 | |
| **2. “Йәш хәбәрселәр”.** | | | |
| 17 | “Йәш хәбәрселәр”. Инеш әңгәмә. | 1 | |
| 18 | “Мораҙым”редакцияһына экскурсия. | 1 | |
| 19 | Нимә ул гәзит жанры? Гәзиттәрҙе ҡарау, сағыштырыу, фекер алышыу. | 1 | |
| 20 | Баш мәҡәлә. Әңгәмә. | 1 | |
| 21 | Хәбәр. Гәзиткә хәбәр яҙырға өйрәтеү. | 1 | |
| 22 | “Һуңғы яңылыҡтар” стена гәзите сығарыу. | 1 | |
| 23 | Нисек фото төшөрөргә? Гәзит-журналдағы фотоһүрәттәр | 1 | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | нимә аңлата? Фекер алышыу. | | |
| 24 | Репортаж. Байрамдарҙан репортаж алыу. | 1 | |
| 25 | Интервью. Әңгәмә. | 1 | |
| 26 | Практик эш. Ветерандан интервью алыу. | 1 | |
| 27 | “Мәктәп тормошо” мәктәп гәзите сығарыу. | 1 | |
| 28 | Район журналисы менән осрашыу. | 1 | |
| 29 | Отчет. Теоретик анализ. | 1 | |
| 30 | Мәктәптә үткән конференция, осрашыу, кисә тураһында отчет яҙыу. Практик эш. | 1 | |
| 31 | “Мораҙым” гәзитенә материал әҙерләү һәм баҫмаға тәкдим итеү. | 1 | |
| 32 | Реклама, иғлан, ҡотлау, афиша яҙыу. | 1 | |
| 33 | “Мәктәп тормошо” мәктәп гәзите сығарыу. | 1 | |
| 34 | Йомғаҡлау дәресе. | 1 | |

**VI класс**.

**Календарь – тематик план**

| № | Тема | Сәғәт һаны | Үткәрелеү ваҡыты |
|---|---|---|---|
| **1. Тыуған илем - алтын бишек.** | | | |
| 1 | Инеш дәрес. Тыуған илем - алтын бишек. | 1 | |
| 2 | Тыуған ил темаһын яҡтыртҡан яҙыусылар ижады. Китапханаға барыу. | 1 | |
| 3 | Башҡортостан буйлап сәйәхәт. Видеофильмдар ҡарау. | 1 | |
| 4 | Республикама дан йырлайым (инша). | 1 | |
| 5 | “Тыуған яғым ынйылары”. Презентация эшләү. | 1 | |
| 6 | “Күкрәгемдән ҡоштар осорам” шиғырҙы яттан һөйләүселәр конкурсы. Ш.Бабич, Б.Бикбай, Р.Ғарипов уҡыуҙарына әҙерлек. | 1 | |
| 7 | “Башҡортостанды беләһеңме?” викторина. | 1 | |
| 8 | Этношәмбе. Музыкаль кисә. | 1 | |
| **2. Исемдәрҙә – илдең хәтере.** | | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 9 | Исемдәрҙә – илдең хәтере. Инеш әңгәмә. Блог булдырыу. | 1 | |
| 10 | Мораҡ топонимының тарихы. Эҙләнеү эше. | 1 | |
| 11 | Күгәрсен районы топонимдары. Музейға барыу. | 1 | |
| 12 | Әүлиә, Эйәрле тауы тарихы. Эҙләнеү эше. | 1 | |
| 13 | Бәндәбикә кәшәнәһенә сәйәхәт. | 1 | |
| 14 | Проект “Топонимик альбом”. | 1 | |
| 15 | Проектты яҡлау. | 1 | |
| **3. Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр!** | | | |
| 16 | Нимә ул матурлыҡ? Диспут-дәрес. | | |
| 17 | Оҫталыҡ класы. Һаҡал, селтәр эшләү. | 1 | |
| 18 | Оҫталыҡ класы. Һаҡал, селтәр эшләү. | 1 | |
| 19 | Күргәҙмә ойоштороу. | 1 | |
| 20 | Матурлыҡ -ул үҙе мөғжизә. Матур ғаилә – ил күрке. Түңәрәк өҫтәл. | 1 | |
| 21 | Рухи донъя. Фекер алышыу. | 1 | |
| 22 | Сәләмәтлек һәм матурлыҡ. Дискуссия. | 1 | |
| 23 | Шағирҙар ижадында матурлыҡ төшөнсәһе. Шиғырҙарҙы яттан һөйләү. | 1 | |
| 24 | Һынлы сәнғәт. Видеофильм ҡарау. | 1 | |
| 25 | Минең ижади емештәрем. Шиғыр, инша яҙыу. | 1 | |
| 26 | Матурлыҡ донъяһы. Кластан тыш сара. | 1 | |
| **4. Утлы йылдар ауазы...** | | | |
| 27 | Тыуған яғым һуғыш йылдарында. Әңгәмә | 1 | |
| 28 | Бер кем дә онотолмай, бер нимә лә онотолмай. Мәктәп музейында экскурсовод булыу. | 1 | |
| 29 | Батырлыҡ юлы ҡайҙан башлана. Ю.Климов - Рәсәй Федерацияһы Геройы тураһында әңгәмә. | 1 | |
| 30 | Ветеранға хат яҙыу. | 1 | |
| 31 | Ветеран менән осрашыу. | 1 | |
| 32 | Һуғыш тураһында монолог. Шиғырҙы яттан һөйләү конкурсы. | 1 | |
| 33 | Кәрәкмәй беҙгә һуғыш. Кластан тыш сара. | 1 | |
| 34 | Йомғаҡлау дәресе. | 1 | |

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**


1. Аҙнабаева Ф.Ғ., Йылҡыбаева Г.Р., Нарынбаева А.З., Харисова М.Р., Әминева Р.И. Гөлбостан: Балалар баҡсаһында телмәр үҫтереү өсөн методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2010. – 416 бит.
2. Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр: Методик ҡулланма. Өфө: Информреклама, 2003.-136 бит.
3. Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу: уҡытыусылар өсөн ҡулланма. – Өфө: Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте, 2009. -176 бит.
4. Аҙнабаева Ф.Ғ., Шафиҡова Г.Р., Йыһангирова Г.М. Мин – шәхес. Мәктәпкәсә йәштәге баланы социаль яҡтан үҫтереүсе программа-методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2011 – 132 бит.
5. Аслаев Т.Х., Атнағолова С.В. Башланғыс мәктәптә телмәр мәҙәниәтен үҫтереү дәрестәре. Уҡыутыусылар өсөн методик ҡулланма. 2-се баҫма, үҙг. – Өфө: Китап, 2009 – 80 бит.
6. Ғималова М. Ғ. Урта мәктәптәрҙең IV – VII кластарында башҡорт әҙәбиәте уҡытыу методикаһы. – Өфө, 1982. – 192 бит.
7. Биҡкужина Т.Ә. Башҡорт теленән кластан тыш эштәр.- Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1997. – 132 бит.
8. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. 1-се киҫәк. – Өфө: Китап, 2010. – 120 бит.


**Сайттар:**


1. www.bashqort.com
2. http://www.kiskeufa.ru/
3. http://www.tugantel-tv.ru/
4. http://bash-mir.ru/
5. http://libmap.bashnl.ru/node/4

Мастерская - форма добровольного объединения детей для занятий определенной деятельностью. Учитель выступает в роли мастера (творца, автора), создавшего свою «школу – производство» учеников, последователей. Отличительные черты: принадлежность содержания деятельности к определенному виду прикладного творчества, ремесла, искусства; приоритет целей обучения и предметно-практических задач; ориентированность на прикладные умения и достижение уровня мастерства в освоении определенного вида деятельности, в освоении специальных технологий; демонстрационно-исполнительское выражение практических результатов и достижений детей (выставки, конкурсы, фестивали).

# “ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ ОҪТАХАНАҺЫ”

## Дәрестән тыш эшмәкәрлек